*Рима АЛСЫНБАЕВА*

# Өршәк буйы башҡорттары

Башҡортостандың үҙәгендә, Ағиҙелдең һул ҡушылдығы Өршәк, тағы Түрһәгәҙе, Ауырғазы йылғаларын һыулап, меркет-мең һәм өршәк-мең башҡорттары йәшәй. Диалекттарын өршәк һөйләше тип атарға була. Үкенескә ҡаршы, Өршәк буйы башҡорттарының һөйләше бығаса ғилми рәүештә һәр тарафтан тикшерелмәне, ул көньяҡ диалекттың дим һөйләшенә ҡаратып йөрөтөлдө. Дөйөм алғанда, дим һөйләшен дә көньяҡ диалекттың бер өлөшө тип сикләү дөрөҫ түгел, сөнки ул бөтә үҙәк Башҡортостанда — Өфө тирә-яғы райондарында ғына түгел, ә күп кенә көнбайыш райондарҙа ла таралып, уның элементтары Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш, шулай уҡ Татарстандың көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш райондарында ла һаҡланған. Ул төбәк халҡы теле нигеҙендә мең һөйләше асыҡ төҫмөрләнә.

Һөйләште тәшкил итеүсе башҡорттар ҡеүәтле мең ырыуҙар берекмәһенең меркет-мең, өршәк-мең ырыуҙарына ҡарай. Хәҙерге көндә улар 25 ауыл булып, Ауырғазы районының Мораҙым, Түрһәгәҙе (халыҡ телендә — Түрҫәгәҙе), Абдулла (Юлдаш), Яңы Этекәй (Дүрттояҡ), Минебай (Дөйәбатҡан), Өсбәлеш, Төрөмбәт, Уҫман (Ҡаҙморон), Игенсе (Күккәзә), Болаш, Түбәнге Бәгәнәш, Нәжметдин (Ҡарағайлы); Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Йәнбәк (Тау Йәнбәге), Иҫке һәм Яңы Муҫа; Дәүләкән районының Иҫке һәм Яңы Мерәҫ, Ҡаҙырғол, Яңы Йәнбәк, Хөсәйен (Өҫәйен); Стәрлетамаҡ районының Абдрахман һәм Яңы Абдрахман (Сумар); Әлшәй районының Мырҙағол, Әбделкәрим (Маянған) ауылдарында йәшәй.

Меркеттәрҙең төп меңле ырыуы араһына кереп китеүе, меркет-мең ырыуы тупланыуы тарихын, рәсми сығанаҡтарға таянып, профессор Р.З.Шәкүров ”Башҡортостан” гәзитендә яҙып асыҡланы (меркеттәр Уралға бер нисә тулҡын булып килә, тәүгеләре — гунн яуы менән). Ул 2007 йылда меркет-меңдәр йәшәгән Мораҙым, Түрһәгәҙе ауылдарына 600 йыл туласағын раҫлай.[1]

1671 йылда 11 мең ырыуы вәкиле ер бүлешеү тураһында Рәсәй батшаһына хат яҙалар. Ер бүлешеүҙә 11 ырыу меңлеләрҙең меркет-меңдәренән Аҡҡондо Аҡманов, өршәк-меңенән кенәз Ҡаҙаштың улы Йәнбаҡты, Сүплек улы Ҡәҙер-Субы була[2]. Меркет-меңдәргә тейгән ерҙәр 12 ауыл араһында бүленеп межалана. Был ауылдар: Мораҙым, Мырҙағол, Сумар (Абдрахман), Маянған (Әбделкәрим), Абдулла, Түрһәгәҙе, Төрөмбәт, Этекәй (Дүрттояҡ), Дөйәбатҡан (Минебай), Мостафа, Өсбәлеш, Ташбаш (Иҫке Төрөмбәт)[3]. Грамота ”Мәскәү император һарайында күнгә баҫылған, ошоноң инабаты өсөн төп асылынан күсермә бирелә”[4], тип күрһәтелә.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң һәр 11 волость үҙ исемен ала. 1866 йылғы, өлөшләтә 1930 йылғы административ реформаларға тиклем Меркет-мең, Өршәк-мең волостарына бүленә. 4-се волость — Ҡаҙаш биләмәләре — Өршәк-мең; 6-сы волость — Ҡәҙер-Субы биләмәләре — Бәгәнәш-мең, 11-се волость — Аҡҡондо Аҡманов биләмәләре — Меркет-мең волосы тип йөрөтөлә башлай[5].

Меркет-меңдәрҙең иң эре ауылдары — Мораҙым һәм Төрөмбәт. Мораҙым поход старшинаһы Мораҙым Сәйетмәмбәтов исемен йөрөтә.

Унының исемендә шулай уҡ йылға һәм шәжәрә бар[6]. Мораҙым һәм Түрһәгәҙе ауылдарын туғанлыҡ ептәре бәйләй. Башта улар Иҫке ауыл тип аталған ерҙә йәшәй. Халыҡ йыйыны йыйылып, берәүҙәре Мораҙым ауылына төпләнә, икенселәре Түрһәгәҙегә нигеҙ ҡора. Абдулла менән Минебай (Дөйәбатҡан) ауылдарында ла ҡәрҙәшлек бар. Абдулла ауылы башҡорто Минебай Ишкәев үҙ улдары һәм дүрт ғаилә менән яңы ауылға нигеҙ һала. Башлап йөрөүсе Минебай Ишкәев исеменән Минебай (Дөйәбатҡан) тип атап алып китәләр[7]. Өсбәлеш, Этекәй, Мостафа ла XVIII быуат урталарына тиклем үк барлыҡҡа килгәндәр. Оҙайлы тарихлы мораҙымдарҙың күршеһе Төрөмбәт шулай уҡ бай тарихлы. Ике ауыл ҡатмарлы тормош һикәлтәләрен бергә үтә. Меркеттәрҙең бер төркөмө хәҙерге Ғафури районында Меркет ауылы булып ултыра. Икенсе төркөм меркеттәр хәҙерге Архангель районы Ҡыҫынды — Ҡыҫындыҡта[8] йәшәй. Мораҙымдар — Иҫке йортта, төрөмбәттәр Дүртөйлө (Иҫке Этекәй) ауылында Иҫке Төрөмбәт булып төпләнә. Торабара мораҙымдар Яланғас тигән урынға күсенә. Төрөмбәттәр ҙә әлеге Солтанморат ауылы урынына Ташбаш булып ултыра. 1761 йылда ерҙәрен мишәрҙәргә (старшиналары Солтанморат Янышев) һаталар. Меркеттәрҙең бер өлөшө, Башҡорт осо булып, Солтанморатта тороп ҡала. Күпселеге хәҙерге Ҡаҙморон (Уҫман) ауылынан көньяҡтараҡ ултыра. Мораҙымдар ҙа был ваҡытта Моронсағылда көн итә. Төрөмбәттәр килеп ултырған ерҙәр өршәк-мең биләмәләре булыу сәбәпле, ултырған ерҙәренән күсенәләр. Инде улар хәҙерге Заготскот тигән ерҙә туҡталып, тамырланырға ниәтләйҙәр һәм тау башына мәсет тә һалып ҡуялар. Салауат ихтилалында ҡатнашыу сәбәпле, ауыл карателдәр тарафынан ер менән тигеҙләнә, мәсет яндырыла[9]. Иҫән ҡалған халыҡ Төрөмбәттең хәҙерге урынында ауыл ҡора. Ошо ваҡытта мораҙымдар ҙа хәҙерге ауылдарын нигеҙләй. Яңы Төрөмбәт Өршәктең уң яғында ултыра. XIX быуатта төрлө яҡтарға һибелгән, һуғыш-ҡыйралыуҙарҙа ерҙән яҙған башҡорттар хөкүмәт ерҙәре ала. Ильясов, Дәүләткилдин, Бикҡужин, Ибраҡовтар — Өфө районы Һабыр (Ҫабыр) ауылынан; Ханнанов, Йәлиловтар — Абдулланан; Иҙрисовтар — Әбделкәримдән (Маянған), Фәйзуллин, Ҡунаҡбаев, Аҫылбаев, Алсынбаев, Сәхибгәрәев, Йосопов, Ҡотлоәхмәтовтар — "кәлсерҙәр" — Сумарҙан (Абдрахман), Сумарға кәлсер-табын ырыуынан күскәндәр. Төрөмбәттең тәүге нигеҙ ҡорған ауылы Ҡыҫынды — Ҡыҫындыҡ та шул ырыуға ҡарағанын хәтерләһәк, һаналған халыҡтың үҙ ырыуҙаштарынан тороп ҡалып, инде килеп ҡушылған меркеттәрҙең бер өлөшө тип тәҡрирләп була. Ауылға нигеҙ һалыусы Төрөмбәт Ырыҫҡолов. Төрөмбәттең өс улы барлығы билдәле: Әбделкәрим, Абдрахман һәм Йәнбәк. Бөгөн Төрөмбәт ҡарттың нәҫеленән Төрөмбәттә Заманов Байегет йәшәй. Төрөмбәт Ырыҫ-ҡоловтың тәүге улы Әбделкәрим ата йортонан 1784 йылда бүленеп, Әбделкәрим (Маянған) ауылын ҡора. Хәҙер был ауыл Әлшәй районына ҡарай. Төрөмбәттең икенсе улы Абдрахман да яңы ауыл ҡороп башҡа сыға. Ауыл унының исеме менән Абдрахман, халыҡса Сумар (Сумар араһы меңлеләрҙең күп ауылдарында осрай) тип атала. Төп ауыл Абдрахмандан бүленеп төҙөлгән ауыл Яңы Абдрахман тип йөрөтөлә. Меркетмеңдәрҙең Түбәнге Бәгәнәш ауылы XVIII—XIX быуаттарҙа Бәгәнәш-

Әбүкән исеме аҫтында билдәле. Бында башҡорт, типтәр, сыуаштар йәшәгән. Бәгәнәш — антропоним, аҙаҡ волость атамаһына әүерелә. Мең волосы 11 волость-ырыуға бүленгәндән һуң (1671 йыл) 1695 йылда Теләш Бәгәнәшев тархан — Теләш ауылы аҫабаһы, үҙ волосы аҫабалары өсөн ҡабат 12-се мең волосы төҙөлөү хаҡында грамота юллап ала. Уның атаһы Бәгәнәш тә тархан була. Яңы волосҡа Бәгәнәш тип исем бирәләр. Теләш ауылын да Бәгәнәш тип үҙгәртәләр. Һуңынан Бәгәнәш Әбүкән исеме менән йөрөтөлә башлай. Әбүкән — ошо ауылдың аҫаба башҡорто[10].

Тархан Теләш Бәгәнәшев башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуҡтарын яҡлаусы булараҡ та тарихта билдәле. 1694 йылдың сентябрендә, Өфө өйәҙе Уса, Ҡазан, Себер даруғалары башҡорттары, шул иҫәптән Теләш Бәгәнәшевтың хатына яуап итеп, "Грамота из Приказа Казанского двора Уфимскому воеводе Д.Н.Головину об ограждении вотчинных прав башкир"[11] тигән документ төҙөлә. XVIII—XIX быуаттарҙа, халыҡ һаны ишәйеү сәбәпле, Һарытау яҡтарына, Селекле йылғаһы буйына Бәгәнәш-Әбүкән ауылынан 14 ғаилә күсенеп китә. Яңы ҡоролған ауылға Бәгәнәш (Ҡондоҙло), рәсми рәүештә Бобров Гай тип исем бирелә[12].

Меркет-меңдәрҙең Бәгәнәш һәм Болаш ауылдары ла бик боронғо. Икеһе лә Рәсәй дәүләтенә ҡушылғандан бик күпкә алда барлыҡҡа килгән. Ике ауыл халҡы бергә Йәйләү йылғаһы буйына йәйләүгә сыға, уртаҡ Ҡыҙҙар ҡайынлығы, туғай бар. Болашта аҫабаларҙан Хөсәйенов, Латиповтар йәшәй.

Өршәк-мең ырыуы ауылдарынан хәҙерге Ауырғазы районы биләмәләрендә Уҫман (Ҡаҙморон) ауылы бар. Ауылға 7-се кантон башлығы ярҙамсыһы Уҫман Ибраһимов нигеҙ һала. Дәүләкән районында өршәк-мең ауылдары бишәү. Мерәҫ ауылы башлап ултырыусы Юлымбәтов Мерәҫтең исемен йөрөтә. 1813 йылда Уҫмандан (Ҡаҙморон) Мерәҫкә есаул булып хеҙмәт итеүсе улы Лоҡман эргәһенә Уҫман Ибраһимов һәм тағы 7 ғаилә күсенә. Торараҡ төп ауылдан Яңы Мерәҫ бүленеп сыға. Ҡаҙырғол ауылына тәү башлап Ҡаҙырғол Бегишев күсенеп ултырып, ауылға исем бирә. Яңы Йәнбәк (Яппар Йәнбәк) Йәнбәктән һәм Яппарҙан бүленеп ултырған. Хөсәйен (Өҫәйен) ауылға нигеҙ һалыусы Хөсәйен Бикбулатов исемен йөрөтә. Ҡырмыҫҡалы районында өршәк-меңдәрҙең 3 ауылы иҫәпләнә. Иҫке Йәнбәк (Тау Йәнбәге) ауылын нигеҙләүсе Төрөмбәт Ырыҫҡоловтоң 3-сө улы Йәнбәк булырға тейеш, тип фаразлайбыҙ.

Муҫа ауылы төп мең ырыуына ҡарай. Өршәк-мең волосы старшинаһы вазифаһын башҡарған Муса Ҡашҡалтаев исемен йөрөтә. Муса өршәкмең улусы старшинаһы булғанға, ахыры, ауыл өршәк-меңдәргә ҡаратыла. Һуңғараҡ Муҫанан бүленеп, Яңы Муҫа төҙөлә. Ауылдарҙа мең (төп мең), өршәк-мең, илекәй-мең башҡорттары йәшәгән[13].

VIII ревизия 17 меркет-мең ауылын теркәгән[14]. Шул исемлектә Айыт (хәҙерге Миәкә районы) ауылы төрөмбәттәр тарафынан үҙ ырыуҙаштары тип танылып, 12 ҡәрҙәш ауылдың береһе тип иҫәпләнә. Ләкин 1816 йылда Айытта юрматы ырыуына ҡараған 3 ғаилә йәшәгәне күрһәтелә. 3 йыл элек — 1813 йылда Айыттан — 12, Абдрахмандан 3 ғаилә Мырҙағол Яуышев башлап ултырған ауылға күсенә. Шулай Мырҙағол ауылы нығынып китә[15]. Талаҫ, Ҡырмыҫҡалы, Кәлсер-Буран хәҙер та-

тар ауылдары булып иҫәпләнә. Кәлсер-Бурандар һуңғы йылдарҙа ғына, 80 йәште уҙып, үҙен, беҙ аҫаба меӊ башҡорттары, тип, бер ваҡытта ла татарса һөйләшмәгән башҡорт ҡарты бар ине, тип хәтерләйҙәр.

Бына шулай тормош һынауҙарын лайыҡлы үтеп, үҙ асылына тоғро, көслө рухлы, үҙ булмыштарына тап килеп торған үҙенсәлекле телле башҡорттар йәшәй Өршәк буйҙарында. Күренекле йәмәғәт эшмәкәре, шағир, ғалим, профессор Рәшит Закир улы Шәкүровтың 2007 йылда Ауырғазы районы Мораҙым һәм Түрһәгәҙе ауылдарына 600 йыл тула тигән фекеренә ихлас ҡушылып, был исемлекте меркеттәрҙең тағы ла ике иң боронғо ауылы — Төрөмбәт һәм Этекәй (Дүрттояҡ) менән тулыландырырға кәрәк тигән фекерҙәбеҙ.

Меӊ ырыуҙар берекмәһе төп меӊ, илекәй, күл-иле, ҡырҡ өйлө (ҡырҡы уйлы), суби, ҡобау, өршәк, меркет һәм һарылы ырыуҙарынан тора. Ырыуҙарҙы берләштереүсе билдә — уртаҡ ҡош — ҡарсыға, уртаҡ ағас — ҡайын, уртаҡ оран — алас. Башҡа ырыуҙар менән аралашыу ҙа, яуҙарға күтәрелеү ҙә ошо берҙәмлек билдәләренән башланған.

## Өршәк буйы башҡорттарының өҫ кейемдәре

XIX быуат аҙағына, XX быуат башына ир-аттың милли кейеме үҙ һыҙаттарын юғалтҡан. Башҡа милләт вәкилдәре менән тығыҙ аралашыу, ылау менән күп ерҙәрҙә булыу, хәрби хеҙмәт ҡанундары менән бәйле күренеш ул.

Ир-ат кейемдәренән айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли кейемдәре тотороҡлораҡ һаҡланған. XX быуаттың 30-сы йылдарында илдә коллективлаштырыу үткәрелә. Колхозлаштырыу Өршәк буйы башҡорттарын да урап үтмәй. Колхоздарға трактор һатып алыу маҡсатында ҡатын-ҡыҙҙарҙың быуындан-быуынға ҡомартҡы хоҡуғында тапшырыла килгән биҙәнеү әйберҙәрен көсләп йыйыуҙар үткәрелә — һәр ғаилә бер ҡаҙаҡ (400 грамм) көмөш тапшырырға тейеш була. Һөҙөмтәлә, Өршәк буйы ҡатын-ҡыҙҙары көмөш биҙәнеү әйберҙәренән, милли кейемдәренән яҙа. Еңһеҙ камзул, бәбәй итәкле күлдәктәр бөгөнгө көндәргәсә килеп еткән. Баш кейемдәренән ир-ат түбәтәйе һаҡланған, ә ҡатын-ҡыҙҙар таҡыяһы онотолған. Бөгөнгө көн йәштәре өсөн түбәндә күрһәтеләсәк кейем-һалым, биҙәнеү әйберҙәренең исемдәре музей терминологияһын хәтерләтер. Өршәк буйы башҡорттарының оло быуын вәкилдәре өсөн ғәҙәти кейем-һалым исемдәре улар.

**Таҫтар** — яулыҡ аҫтынан кейелгән, башты әйәк аҫтынан уҡ алып сорнап ураған оҙон (2 метр самаһы) йоҡа туҡыма.

**Хәситә** — бер яҡ ҡултыҡ аҫтынан үткәрелеп, икенсе яҡ яурын аша кейелә торған, тәңкә баҫып биҙәлгән таҫма.

**Арҡаса** — камзол. Өршәк һөйләше эсендә был кейемде төрлөсә атайҙар: арҡаса (Юлдаш), башҡа ауылдарҙа камзул, билле камзул.

**Күпмә** — еңһеҙ, эсенә мамыҡ һырылған өҫ кейеме, һырылған бишмәт, көпө.

**Сәмсәле ситек** — йомшаҡ күндән сигеп эшләнгән ситек. Сәмсә — биҙәк.

**Кәләпүш** — бәләкәй балаларҙың баш кейеме, теүәтәй.

**Башлыҡ** — балаларҙың еңел баш кейеме.

**Таҡыя** — ҡыҙҙарҙың баш кейеме. Ошо уҡ мәғәнәлә бөрйәндәрҙә һаҡланған.

**Сәсҡап** — сәс толомон артҡы яҡтан ҡаплап кейелгән, тәңкә баҫып тегелгән биҙәнеү әйбере, ул елкәне ҡаплап тора. Шулай уҡ тәңкә баҫылған, башҡа түңәрәкләп кейҙерелгән ҡулса (һарауыстың бер төрө).

**Маңлайса** — маңлайса — тәңкә баҫып тегелгән тар ғына ҡулса, яулыҡ эсенән башҡа кейелә.

**Гөмбәҙ** — көмөштән һырлап, ҡабартып сүкеп эшләнгән, түшкә тағылған ҙур биҙәнеү әйбере (түбәнге Дим башҡорттарында — маҙа).

**Биллек** — еләндең ике биленә мәрйен, тәңкә баҫып биҙәлгән урыны. Әҙәби телдә лә, башҡа һөйләштәрҙә лә күҙәтелмәй.

**Кештәк** — еңдең ҡултыҡ аҫтына өсмөйөш формаһында ҡыҫтырып тегелгән туҡыма. Туҡ-соран, Инйәр, Ҡариҙел, Танып, Төй, Ғәйнә башҡорттары һөйләштәрендә лә ошо уҡ мәғәнәлә ҡулланыла.

**Француз яулыҡ** — ҡыҙыл төҫлө ерлеккә эре аҡ сәскә төшкән ҙур яулыҡ. (Дөйөм алғанда, мең ырыуы халҡы ҡыҙылдан кейенгәнде өнәп бөтмәй — тыйнаҡһыҙлыҡ билдәһе тип ҡарай).

**Ғыжым шәл** — суҡлы ебәк шәл. Туҡ-соран, Дим буйҙарында ла ошо мәғәнәлә ҡулланыла.

**Ҡыйыҡ шәл** — өсмөйөш формаһында бәйләнгән йөн шәл, ҡыйыҡса.

**Оҙон ойоҡ** — тубыҡ аҫтына еткереп, һырлап, биҙәп, йөндән бәйләнгән ойоҡ.

**Марйа ойоғо** — ҡатын-ҡыҙҙарҙың еп ойоғо.

**Марйа тарағы** — сәскә ҡыҫтырып ҡуйыла торған ярымтүңәрәк формалы тараҡ.

**Башалтай** — йөн ойоҡбаш, башҡа һөйләштәрҙә башалай, башай, башаҡай.

**Әҙепле күлмәк** — күлдәктең итәгенә ҡайтармаһы күлдәк ишенән, йә башҡа төҫтән ҡуйып тегелгән күлдәк.

**Биле бөрмәтле күлмәк** — биленә бау үткәреп, бөрөлөп торған билле күлмәк.

**Оборкалы итәк** — ҡатлығарын, бәбәй итәк, бәбәйтәк, бәбәйле күлмәк, итәк ҡаты.

**Татар бәбәйе** — ике эргәнән бала итәк һалып тегелгән күлдәк.

**Күкрәксә — түшелдерек** — төрлө төҫлө тауарҙан йә төрлө төҫлө таҫмаларҙан буй һалып теккән күкрәк япмаһы.

**Муҡсай** — сигеп, мәрйен баҫып тегелгән бәләкәй тоҡсай. Ҡыҙҙарҙың ваҡ әйберҙәрен һала торған тоҡсай ”косметичка”, бау менән билгә урап бәйләнә.

**Инә туны** — кейәү тарафынан ҡәйнәһенә бүләк ителгән тун — инәтун.

**Бәрән ҡабы** — тун, ”пойрковая шуба”, бәрәнҡап.

**Ҡыптыртун** — буялмаған тышһыҙ тун.

**Ҫырма** — эсенә мамыҡ һырып тегелгән өҫ кейеме, фуфайка.

**Ҫырыған салбар** — эсенә мамыҡ һырып тегелгән ҡышҡы салбар.

**Сигем** — сигеп эшләнгән әйбер.

**Тыныш биҙәк** — һирәк кенә сигелгән биҙәк.

**Селтәр тотоу** — сигеп эшләнгән әйберҙең аҫҡы өлөшөнә бәйләнгән селтәр ҡушып тегеү.

**Ҡамбылау** — сигеү. Ҡамбылау ике төрлө була: 1) арҡыры ҡамбы; 2) шыма ҡамбы.

**Ҫөлгө** — ике яҡ башы сигеп селтәр ҡуйып эшләнгән таҫтамал.

**Ҡата** — күн аяҡ кейеме.

**Бышмырлы ҡата** — оҙон ҡайыш бау үксәһенә беркетелеп, ойоҡ тышынан урап (бышмырлап) кейелгән ҡата.

**Ҡуңыслы ҡата** — туҡыманан (сукно) ҡуңыс тегеп эшләнгән ҡата.

**Пыштый ҡата** — йәш балаларҙың күндән тегелгән йомшаҡ аяҡ кейеме.

Яулыҡты ябыныу йәһәтенән дә өршәк һөйләше башҡа һөйләштәрҙән ныҡ айырыла.

**Яҙып ябыныу** — йәйеп ябыныу.

**Татар сөйөүе** — яулыҡты йәйеп, артҡа сөйөп бәйләү.

**Марйаса ябыныу** — яулыҡты өсмөйөш формаһы бирең ябыныу.

**Көйәнсә бәйләү** — көйәнсәләй ябыныу — йәйеп ябыныу.

**Ҡаптырма** — (ҡаяулы ҡаптырма) — ҡатын-ҡыҙ ҡалын шәлде урап, йә иң башына һалып, алдан ҡаптырып (ҡаяп) ҡуйыу өсөн ҡулланыла, ике өлөштән тора: ҡулсанан һәм ҡаяуҙан. Көмөш йәки еҙҙән эшләнә.

---

*Әлбиттә, килтерелгән өҫ кейемдәре исемлеге быныҥ менән генә сикләнмәй. Беҙ бында башка яктарҙан ныҕырак айырылҕандарына ҕына туктaлдык.*

## Ҡулланылған әҙәбиәт


[1] Шәкүров Р.З. Быуаттар аманаты. Өфө, 2002. 320-се бит.
[2] Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн.7. Уфа, 1987. 5-се бит.
[3] Башкирские родословные. Уфа, 2002. 297—298-се биттәр.
[4] Шәкүров Р.З. Тамырҙарың тәрән һинең, Мораҙым!//Башҡортостан. 3.04.2006 й.
[5] Асфандияров А.З. Шунда уҡ. 65-се бит.
[6] Башкирские родословные. Уфа, 2002. 287—298-се биттәр.
[7] Башҡорт халыҡ ижады. II том. Өфө, 1997. 86-сы бит.
[8] Башҡортостан Республикаһының топонимдар һүҙлеге. Өфө, 2002. 140-сы бит.
[9] Башҡорт халыҡ ижады. II том. Өфө, 1997. 229-сы бит.
[10] Асфандияров А.З. Шунда уҡ. 135-се бит.
[11] История Башкортостана. С древнейших времен до конца XIX века. Учебник для 8 класса средней общеобразовательной школы. Уфа, 2005. 85-се бит.
[12] Асфандияров А.З. Башкирские деревни Саратовской области // Ватандаш. 2004. № 4. 189-сы бит.
[13] Асфандияров А.З. История сел и деревень Башкортостана. Кн.2-3. Уфа, 1987. 281—283-сө биттәр.
[14] Томашевская Н.Н. От социального пространства к социальному времени: опыт этнической истории башкирского этноса в новое время. Уфа, 2002. 62-се бит.
[15] Асфандияров А.З. Шунда уҡ. 281—283-сө биттәр.
[16] Ауырғазы районы Төрөмбәт урта мәктәбе музейы материалдары.

## Өршәк буйы башҡорт ауылдарының этник составы

| Ауыл исеме | Ырыу | Ара | Тамға | Этник составы |
|---|---|---|---|---|
| **Ауырғазы районы** | | | | |
| Түбәнге Бәгәнәш (Әбүкән, Яран) | меркет-мең | | çәнәк, ураҡ, әүернә | типтәрҙәр, мишәр типтәрҙәре |
| Нәжметдин (Ҡарағайлы) | меркет-мең | | | аçаба башҡорттар |
| Иçке Этекәй (Дүртөйлө)<br>Яңы Этекәй (Дүрттояҡ) | меркет-мең<br>меркет-мең | аҡкондо<br>аҡкондо | | типтәрҙәр, мишәр типтәрҙәре |
| Абдулла (Юлдаш) | меркет-мең | аҡкондо | | аçаба башҡорттар |
| Мораҙым | меркет-мең | аҡкондо, таҙ, ҡара, байым, кинйәкәй | | аçаба башҡорттар |
| Минебай (Дөйәбаткан) | меркет-мең | аҡкондо | | аçаба башҡорттар |
| Өсбәлеш (Туғай) | меркет-мең | аҡкондо | | аçабалар |
| Төрөмбәт (Яңы Төрөмбәт) | меркет-мең | аҡкондо, ҡарасман, бүре, ҡарға, ҡуян, кәнсер | ҡаҙаяҡ, çәнәк | этәмбәйҙәр, аçабалар |
| Түрһәгәҙе | меркет-мең | аҡкондо, тубай сора | | аçабалар |
| Игенсе (Күккәҙә) | меркет-мең | аҡкондо, шиҡай | | аçабалар, этәмбәйҙәр |
| Уçман (Ҡаҙморон) | меркет-мең, өршәк-мең | ҡаҙаш, бүре, ҡуян, ҡарға, үгеҙ, көҙәкә | эмзә | аçабалар |
| Болаш | меркет-мең | болаш, кәлмәш, йөнтәй, ҡаранай, ҡарға | ураҡ, әүернә | аçабалар, этәмбәйҙәр |
| **Стәрлетамаҡ районы** | | | | |
| Иçке Абдрахман<br>Абдрахман<br>Яңы Абдрахман (Сумар)<br>Бәгәнәш | меркет-мең<br>меркет-мең<br><br>меркет-мең | аҡкондо<br><br><br>аҡкондо | çәнәк<br><br><br>çәнәк, ураҡ, әүернә | аçабалар<br>аçабалар<br>аçабалар<br>аçабалар, типтәрҙәр, татарҙар |

| Ауыл исеме | Ырыу | Ара | Тамға | Этник составы |
|---|---|---|---|---|
| **Дәүләкән районы** | | | | |
| Яңы Йәнбәк (Яппар Йәнбәк) | өршәк-мең | ҡаҙаш, мырҙай, шәлтәй | | |
| Иҫке Мерәҫ | өршәк-мең | ҡаҙаш, дүәрән, (яңылар), сыуаш, мыштай | | |
| Яңы Мерәҫ | өршәк-мең | ҡаҙаш | | |
| Хөсәйен (Өҫәйен) | өршәк-мең | ҡаҙаш, ҡуян, сирмеш, ваҡлар |  кәләп сүмес | |
| Ҡаҙырғол | өршәк-мең | көҙән (көҙәкә), луҡай, беҙәй, сирмеш |  | |
| **Ҡырмыҫҡалы районы** | | | | |
| Иҫке Йәнбәк (Тау Йәнбәге) | өршәк-мең | |  | аҫабалар |
| Иҫке Муҫа | мең, ишекәй-мең, өршәк-мең, | баҡа, торна, ҡара ҡорҫаҡ, олоғолаҡ |  | |
| Яңы Муҫа | илекәй-мең, мең | ҡуян, шырыш, ҡотой |  әмзә, һәнәк | типтәрҙәр |
| **Әлшәй районы** | | | | |
| Мырҙағол | меркет-мең | аҡҡондо, бүре | | аҫабалар |
| Әбделкәрим (Маянған) | меркет-мең | аҡҡондо | | аҫабалар |

*Өршәк буйы башҡорт ауылдарының этник составын билдәләүҙә А.А.Камаловтың "Башкирские географические термины и топонимы" хеҙмәте файҙаланылды.*

*Өршәк һөйләшен үҙ эсенә алған башҡорт ауылдары хәҙерге административ-территориаль бүленеш буйынса бирелде. Район эсендә ауылдар ырыуҙарға ҡарата берләштерелде һәм һаҡланып ҡалған тамғалар күрһәтелде.*